# Беҙҙең студент йылдары

№4 20 апрель, дүшәмбе 2009 йыл

Туймазы педагогия колледжының Туған телдәр бүлеге гәзите

**Абдуллина Динара мөхәррир: гәзитебеҙҙең был һанында ижади шәхес, ижади эшмәкәрлек хаҡында һөйләшергә саҡырабыҙ**

Нимә ул ижад? Һүҙлектә “фән һәм мәҙәниәт байлыҡтарын тыуҙырыу өлкәһендәге эшмәкәрлек” тигән аңлатма бирелә. Бик күп психолог һәм педагогтар ижад хаҡында ғилми хеҙмәттәр яҙалар. Уларҙың фекеренсә, бөтә балалар ҙа тиерлек ижади эшләргә һәләтле була. Тик ғаилә тәрбиәһен, балалар баҡсаһын, мәктәпте үткәндән һуң, уларҙың һирәктәре генә тороп ҡала. Педагогик хеҙмәттәрҙә ижади һәләттәрҙе үҫтереүгә ижади эшмәкәрлек менән социаль мөхит булышлыҡ итә, тиелә. “Тәбиғәт кешеләрҙе ижад итеү өсөн донъяға тыуҙырған”,-ти бөгөнгө башҡорт теле уҡытыусыларының береһе Юлдашбаев Н. “Ижади кешеләр тип атаҡлы рәссам, шағирҙарҙы ғына атау дөрөҫ булмай. Ижади кеше үҙ тормошонан картина, шиғыр төҙөй”,-ти фәйләсүф Ошо.

Фекерҙәр күп. Әммә беҙҙең тағы ла уҡытыусыларыбыҙҙы тыңлағы килде.

Ғәлләмова Р.Ә., тәрбиәүи эштәр буйынса директор урынбаҫары: ижади кешенең күңелендә гелән илһам ҡояшы балҡый, был ҡояш йыр, шиғыр яҙыуға ғына түгел, бөтә эштәрҙе лә күңел һалып башҡарырға рухландыра.

Мөсифуллин С.Р., Информатика бүлеге мөдире: бер туҡтауһыҙ фекерҙәр, уйҙар солғанышында йөрөүсе, дрнъяның ваҡ мәшәҡәттәренән өҫтөн кеше.

Кәримова Г.Я., башҡорт теле уҡытыусыһы: ниндәйҙер иҙге эш башҡарыу өсөн башҡалар йөрөгән юлдан түгел, ә үҙе һалған һуҡмаҡтан барыусы кеше ижади кеше булалыр. Былдай кешеләр эштән рухи кинәнес ала белә.

Фатихова З.С., Туған телдәр бүлеге мөдире: тынғыһыҙ, һәр ваҡытта эҙләнеү юлында булыусылар ижади кеше исеменә лайыҡ. Мәҫәлән, уҡытыусылар.

Гәрәева И.Х., педагогик практика буйынса мөдир: ижади кешеләр тип мин тормошта үҙ-үҙҙәрен табыусы кешеләрҙе һанайым.

**Ижади кешеләр беҙҙең педколледжда ла күп. Улар булмаһа беҙҙә республика кимәлендә саралар үҙғарылмаҫ, төрлө ярыштарҙа еңеүселәр булмаҫ ине. Шулар менән таныштырайыҡ әле.**

## Яңылыҡтар

27-28 мартта беҙҙең колледжда «Педагогик оҫталыҡ» тип аталған сара ойошторолдо. Республика колледждарынан йыйылған уҡытыусылар Мөсифуллин С.Р., Дронова А.А. дәрестәрендә булдылар. Сара юғары кимәлдә үтте.

14-15 апрелдә беҙҙә педагогика һәм психология буйынса педколледж студенттары араһында конкурс үтте. Республиканың 13 колледжынан килгән 39 иң яҡшы студент көс һынашты. 1-се урынды Байназарова Н. (Салауат), 2-се урынды Йомағужин Ш. (Белорет), 3-сө урынды Йәнгирова З. (Нефтекама) яуланы. Беҙҙең Мөхөтдинова К. финалға сыкты. Колледжда үткән бәйге менән бөтәһе лә ҡәнәғәт ҡалды.

9-10 апрелдә 33-сө төркөм студенты Петрова Е. Мөсифуллин С.Р. менән Обнинск ҡалаһына барҙылар улар Рәсәй кимәлендә уҙғарылған «Фән.Мәҙәниәт.Йәшлек» конференцияһында ҡатнашып, 2-се урын алып ҡайттылар. Афариндар!

9 апрелдә башҡорт теле уҡытыусыһы Фатихова Ш.Х. Рәшит Ниғмәтиҙең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы республика конференцияһында ҡатнашты, ул шағирҙың Туймазылағы тормошо менән таныштырҙы. Фотола - Фатихова Ш.Х. Рәшит Ниғмәтиҙең ҡыҙы менән..







## Һәләтле студенттарыбыҙ

Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай,
Шундай ҡыҙҙар – ят та ул инде!

Был һүҙҙәр башҡорт әҙәбиәтен белгән кешеләр өсөн яҡшы таныш. Уларҙы Р. Ғарипов яҙған. Кемде күреү уны шиғыр яҙырға ҡанатландырҙы икән? Быны берәү ҙә әйтә алмай. Әммә мин шуны беләм: эргәнән берәй сибәр ҡыҙ үтеп киттеме – Р. Ғарипов һүҙҙәре ҡылт итеп иҫкә төшә. Бына әле Нәфисәне күргәс, минең дә иҫемә төштө. Һылыу ҡыҙ педколледждың V курсында уҡый. Сибәрлек бәйгеһендә лә һыр бирмәҫлек. Әммә республика кимәлендәге бәйгегә барып ҡайтыу ҙур һәм яуаплы эш булһа ла, иптәштәрен, эргәләге кешеләрен һәр ваҡыт һоҡландырырлыҡ итеп йәшәү тағын да ҡатмарлыраҡ.

Беҙҙең бүлектә уҡыусылар уны иң ижади студенттар рәтенә индерә. Бына әле беҙ унын менән әңгәмәләшеп ултырабыҙ.

***– Нәфисә, беҙ һине йыр-моңға ғашиҡ кеше итеп күрәбеҙ. Был һөйөү ҡайҙан килә тип уйлайһың?***

– Баймаҡ яҡтары йырсы, бейеүсе һәм башҡа талантлы кешеләргә бик бай. Бәләкәй саҡтан артистарыбыҙҙың концерттарына йөрөп, уларҙың ижады менән яҡын таныштым. Тыңлаған йырҙар күңелде рухландыра, ә ҡараған бейеүҙәр, дәрт-дарманымды таштырып, яңы үрҙәргә әйҙәй. Шуға күрә лә йыр-моңға бәләкәй саҡтан уҡ ғашиҡмын.

***– Һиңә нимә яҡыныраҡ: бейеүме, сәнғәтме, әҙәбиәтме, фәнме, уҡытыусылыҡ эшеме?***

– Иң тәүге ҡыҙыҡһыныуҙарым шиғриәт менән бәйле. Шиғырҙарҙы бик күп уҡыйым һәм үҙем дә яҙам. Уҡытыусылыҡ эше мине бәләкәй саҡтан арбаған инде. Быға тәүге уҡытыусым сәбәпселер, бәлки, сөнки ул минең өсөн идеаль кеше кеүек күренде. Колледжда уҡырға килгәс, фән өлкәһендәге төрлө тикшеренеүҙәр үткәреп, яңы баҫҡысҡа менгәндәй тойҙом. Бейеү-ул минең күңелем, бар булмышым тип тә әйтергә була. Сөнки мин бейегән саҡта үҙемде ысын боронғо башҡорт ҡыҙҙары кеүек хис итәм. Ниндәйҙер ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм. Бәлки, халҡымдың ошондай оҫта һалынған, һәр кемдең күңелен арбарлыҡ бейеүҙәре булғанғалыр.

***– Һин ниндәй сараларҙа, бәйгеләрҙә ҡатнаштың? Улар ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?***

– Колледжда уҡыған дәүеремдә Өфөлә үткәрелгән «Һылыуҡай» конкурсына барып үҙемде һынап ҡараным. Унда үҙем өсөн бик ҡыҙыҡлы яңылыҡтар менән таныштым. Уларҙы артабан үҙемдең образымды тулыландырыуҙа ҡулландым тиһәң дә була. Яратҡан артистарым – Венер Камалов, Заһир Байыҡ менән, «һин дә мин» аралашыуға бәйле күңелле иҫтәлектәр «алып ҡайттым».

2008 йылдың йәйендә республика кимәлендә үткәрелгән «Салауат йыйыны»нда «Сая ҡыҙҙар» конкурсында ҡатнашып, «Иң һөйкөмлө һәм наҙлы» дипломына лайыҡ булдым. Бындағы хәтирәләрҙе яҙа башлаһаң, бик ҙур инша килеп сығыр ул. Шулай ҙа иң ҡыҙығын әйтеп үтәйем. Конкурста ҡатнашыр өсөн миңә махсус рәүештә атта йөрөргә һәм сабырға өйрәнергә тура килде. Бик күп ҡыҙыҡлы мажараларға тарып бөттөм. Ярышта өсөнсө килдем. Атта үҙемде ҡыйыу тотоуым бар конкурсанттарҙы ла һоҡландырҙы, буғай.

***- Беҙҙең бүлек студенттары һине ижади кеше тип һанай. ! Һин үҙеңде ниндәй итеп һүрәтләр инең?***

– Мин үҙемде әҙәбиәттәге «антитеза» тип әйтер инем. Күңел тормошом һәр саҡ үҙгәреп тора. Мине яҡшы белгән кешеләр быны беләләр. Әммә үҙемдә булған яҡшы сифаттарымды һаҡларға тырышам.

***– Ижади үҫеүеңдә, гөмүмән, шәхес булып формалашыуыңда ғаиләң дә йоғонто яһайҙыр? Һин нимәләр әйтер инең?***



– Ғаилә - бөтә кешенең дә иң ҡәҙерле байлығы. «Бөтә башланғыс ғаиләлә» тигән фекер менән тулыһынса ризалашам. Үҙемдең ошолай булыуыма ата-әсәйемә ҙур рәхмәтлемен. Атайым мине тырыш, еңмеш, гәҙел, түҙемле булырға өйрәтһә, әсәйем итәғәтле булырға, кешегә тик яҡшылыҡ ҡылырға өндәне. Өләсәйем гел дә: «Яҡшы һүҙ йән аҙығы, яман һүҙ баш ҡаҙығы», - ти торғайны. Был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк ята.

***– Һин киләсәктә башҡорт теле уҡытыусыһы буласаҡһың. Ижади кеше менән ижади уҡытыусы. Улар тап киләме?***

– Алла бирһә, донъялар имен-аман тороп, үҙ һөнәрем буйынса эшләһәм, яҡшы уҡытыусы булырға тырышасаҡмын. Тәүге йылда адаптация үтермен. Ә киләһе йылдарҙа үҙемде ижади яҡтан да үҫтерергә лә бар көсөмдө һаласаҡмын. Минеңсә, уҡытыусы мотлаҡ ижади яҡтан үҫергә тейеш.

***– Ниндәй хыялдар менән янып йәшәйһең?***

– Алла бирһә, һөйгәнем менән бәхетле ғаилә ҡорорға теләйем. Әлегә иң мөһиме шул. Һәм, әлбиттә, көрсөк ваҡыты тиҙ үтеп китеп, үҙ һөнәрем буйынса мәктәпкә уҡытыусылыҡ эшен башларға, «дөрләп янып» эшләргә!

***Һүҙемде Р. Ғарипов шиғыры менән башлағайным Нәфисә менән һөйләшкәндә, әҙиптең эш, хеҙмәт хаҡындағы шиғырҙары иҫкә төштө:***

Һөйһәң, һөй һин, үкенмәҫлек итеп,
Эшләһәң һин, эшлә емереп!

***Нәфисә менән беҙ бөтә уйлағандарын тормошҡа ашырырға көс ҡеүәт, дәрт-дарман теләп айырылыштыҡ.***

Колледжда ижади студенттарыбыҙ бихисап. Мәҫәлән, Алчинова Алевтина тигән исем әллә күпме фәнни сараларҙа яңғырай. Әйткәндәй, беҙҙең колледж был ҡыҙҙы ла ижади студент тип һанай. Ижади ҡыҙҙар менән танышыуыбыҙҙы дауам итеп, Информатика бүлегенең 33-сө төркөмөнә юлланабыҙ. Беҙҙе бәләкәйерәк буйлы, асыҡ йөҙлө, күҙҙәренән нур бөркөп торған ҡыҙ ҡаршы алды. Әңгәмәне башлайбыҙ.

***– Үҙеңдең ҡатнашҡан бәйгеләр, фәнни хеҙмәттәрең менән таныштырып үтһәңсе.***

– Үткән йылда «Рус түгел мин, ләкин росиянмын!» тигән тасуири уҡыусылар бәйгеһендә ҙур теләк менән ҡатнаштым. Быйыл беҙҙең төркөмдән биш студент Салауат Ришат улы етәкселегендә Мәскәүҙә уҙғарылған «Флюров уҡыуҙары» конференцияһында булып ҡайттыҡ. Тағы ла республика кимәлендә үткән «Йәшлек.Фән. Мәҙәниәт» фәнни-практик конференцияһында тикшеренеү

эштәре менән сығыш яһаныҡ. Июль айҙарында йәйге тикшеренеү мәктәбенә эләктем. Ул Тверь өлкәһе Фиров районы Рождество, ауылында ойошторолдо. Ике аҙна уҡыу дәүерендә беҙ репортаж яҙыу, интервью алыу кеүек эштәргә өйрәндек, шулай уҡ төркөмдәргә бүленеп ҡыҙыҡлы газеталар сығарыу эшен башҡарҙыҡ.

***– Яңыраҡ республика кимәлендә үткән «Педагогик осталыҡ»та һин төрлө эштәр башҡарҙың. Шулар хаҡында һөйлә әле.***

– Беҙ Мөсифуллин С.Р. улы менән күптән уйлап йөрөгән уйыбыҙҙы тормошҡа ашырҙыҡ – феминизм проблемаһына арналған «түңәрәк өҫтәл» үткәрҙек. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ мине был һорау әллә ҡасан борсой ине. Эшләү барышында әллә күпме яңылыҡтар белдем. «Түңәрәк өҫтәл» уңышлы, файҙалы үтте һәм юғары баһаға лайыҡ булды.

***– Беҙҙә озаҡламай республика кимәлендә тағы бер сара - «Педагогика һәм психология буйынса» колледж студенттары бәйгеһе» көтөлә. Моғайын, ҡатнашаһыңдыр?***

– Беҙ концертта ҡатнашабыҙ. Бейейбеҙ. Был шөғөл миңә бик оҡшай, ошонда ял итәм тип әйтһәм дә була.

***– Һине колледж студенттары ижади кеше итеп һанай. Был исемгә лайыҡ булыр өсөн ниндәй сифаттар кәрәк? Ҡайһы сифаттарҙы тәбиғәт бирә, ҡайһыныһын булдырырға кәрәк?***

– Был кешенең характерына бәйле. Әгәр кеше яуаплы, инициативалы, үҙ эшен ҙур дәрт менән башҡарыусы һәм оптимист булһа, минеңсә, бындай кеше бөтә уйлаған эштәрен тормошҡа ашыра ала. Тәбиғәт биргән сифаттарҙы үҫтереү өҫтөндә һәр ваҡыт эшләргә кәрәк. Өлгәшкән уңыштарҙа туҡтап ҡалмаҫҡа, һис шикһеҙ алға барырға!

***– Уҡыуға нисек өлгәшәһең? Буш ваҡытың ҡаламы? Буш ваҡытта яратҡан шөғөлөң бармы?***

– Былай минең буш ваҡытым юҡ тиерлек Яңы ғына эш - ҡыуарҙар курсын үттем, көн дә бейеү түңәрәгенә йөрөйөм. Был - минең хобби. Шулай уҡ йога менән шөғөлләнәм, ул миңә энергия бирә.



***– Ата-әсәң һинең ошондай тулы ҡанлы тормошоңа нисек ҡарай? Ҡаршы килмәйме? Гөмүмән, ғаилә йәш кешегә, баланың үҫеүенә нисек йоғонто яһай тип уйлайһың?***

– Әлбиттә, ғаилә баланың үҫеүенә ҙур йоғонто яһай. Мин үҙемдең ата-әсәмде бик яратам. Улар минең бәйгеләрҙә ҡатнашыуыма ҡаршы килмәйҙәр, киреһенсә ярҙам итәләр. Йәш сағында ата-әсәйем дә актив булған, шуға күрә улар мине аңлай.

***– Киләсәктә үҙеңде ниндәй уҡытыусы итеп күҙаллайһың?***

– Үҙемде бик талапсан, ғәҙел уҡытыусы итеп күрәм. Уҡыусыларҙы тәрбиәле, аҡыллы белемле кеше үҫтерергә тырышасаҡмын.

Бейергә, шиғыр һөйләргә, фәнни хеҙмәт өлкәһендә эшләргә, гәзиткә мәҡәләләр яҙырға һәләтле ҡыҙ был Алевтина! Киләсәктә лә туҡталып ҡалмаясағына ышанысты белдереп, олораҡ уңыштарға ирешеүен теләп айырылышабыҙ. Алевтина менән

***Исмәғилева Л. (42-се төркөм)***

**Фәнни хеҙмәт тә ижад емеше…**
Кузнецова Т.В., ТПК-ның фән буйынса директор урынбаҫары

## Курс эшен яҡлағанда

Күптән түгел колледжда курс эшен яҡлау көнө булып үтте. Был әһәмиәтле ваҡиғаны беҙ темаларҙы һайлаған көндән алып түҙемһеҙлек менән көттөк. Бына темалар һайланды, бурыстар, маҡсаттар ҡуйылды. Эшкә тотондоҡ. Материалдар туплап, ең һыҙғанып яҙырға керештек. Курс эшен башҡарыу еңел булып сыҡманы. Беҙҙең өсөн беренсе ҙур күләмле үҙ аллы эш. Рәхмәт етәкселәребеҙгә, был ҡатмарлы, ауыр мәсьәләлә беҙгә кәңәш биреп, ярҙам итеп торҙолар.



Бына башҡарылған эшебеҙҙең һығымтаһын күрһәтеү көнө лә килеп етте. һайланған темалар бик ҡыҙыҡлы, актуаль. Улар яңы технологиялар ҡулланыу, билдәле яҡташтарыбыҙҙың ижадын өйрәнеү, методикаһына ҡағылышлы.



Ҡайһы бер эштәргә айырым туҡталып үтәһе килә. Абдуллина Динара башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә йыр материалдарын ҡулланыу мөмкинлектәрен иҫбатланы. Исмәғилева Ләйсән Рәшит Ниғмәтиҙең ижадын өйрәнгәндә яңы технологиялар ҡулланыу темаһын һайлап яңылышмаған. Эше ҡыҙыҡлы ла, файҙалы ла килеп сыҡҡан. Рафикова Гөлназ бишенсе синыфтарҙа уҡыусыларҙы тасуири уҡырға өйрәтеү темаһын һайлаған. Татар төркөмсәһенән Ғәләмова Рәзилә бик ҡыҙыҡлы, үҙенсәнсәнлекле теманы- татар әҙәбиәтендә уҡытыусы образын тикшергән. Эштәрен яҡлағанда, студенттарҙың күбеһе презентация ҡулланды. Ҡыҙҙар слайд-шоуҙы ҡыҙыҡлы, теманы тулыһынса асырҙай итеп эшләгәндәр. Бөтә студенттар ҙа курс эшен сығарылыш квалификацион эшкә үҫтерергә тигән ҡарарға килделәр. Сөнки темалар, ысынлап та, бик уңышлы һайланылған, мәктәптә ҡулланыла торған, актуаллеге юғалмаясаҡ, бик кәрәкле.



Дөйөм алғанда, был эште башҡарыу беҙгә бик оҡшаны. Ауырлыҡтар тыуһа ла, уларҙы еңеп, хаталарҙы төҙәтеп, уңышлы итеп башҡарҙыҡ, ҡуйған маҡсаттарға ирештек. Етәкселәребеҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Кәримова Г.Я., Фатихова Ш.Х., Вәхитова Ә.Г., һәм Латыпова И.Ә. юғары баһаланылар, беҙҙең эшебеҙ менән ҡәнәғәт булдылар.

Шулай итеп, фәнни эҙләнеүҙәр артта ҡалды, тағы бер яуаплы эш тамамланды.

*Әхмәҙиева З. (42-се төркөм)*

## Якташтарыбыҙ ижады



### Яҙыусының үҙен күрҙек!

Ҡаяһынан айырылһа,
Бөркөт була көсһөҙ.
Ҡыуағынан айырылһа,
Былбыл һайрай хисһеҙ
Төйәгенән айырылһа,
Сәсән ҡала һүҙһеҙ
...Ерем! Тамырҙарым һиндә,
Нишләр инем һинһеҙ?!

Был шиғыр юлдарын Туймазы районының Төпкилде ауылында тыуып үҫкән Муса Шәрәфетдин улы Сиражетдинов яҙған. Бөтә республика уны Муса Сиражи 1939 йылдың һыуыҡ февраль айында тыуған. Ғаиләһендә, мәктәптә бәләкәйҙән шиғриәткә һөйөү тәрбиәләнгән. Бәлки, Нөгөш буйҙары, берәй тылсымға эйәлер?! Сөнки, беҙ белеүебеҙсә, унда Нөгөш һыуын эсеп үҫкән Ә. Мирзаһитов, С. Сафуанов кеүек күренекле шағирҙар, яҙыусылар ҙа бар бит!



Шиғыр һөйөүселәр М. Сиражиҙың бик күп китаптарын яҡшы беләләр.

20 март, йәғни Башҡортостанды автономиялы республика тип иғлан иткән көндө, беҙ Туймазы татар драма театрында Муса Сиражиҙың тыуыуына 70 йәш тулыу айҡанлы үҙғарылған кисәгә барҙыҡ.

Концертты Туймазы районы һәм ҡалаһының хакимиәт башлығы урынбаҫары Нәсибуллина Э.Ҡ асып ебәрҙе. Бик йөкмәткеле ҡотлау һүҙҙәре әйтеп, бүләктәрен тапшырып зурланы ул шағирҙы.

Артабан һүҙҙе Яҙыусылар союзынан килгән ҡунаҡтарға - юмор хисле Ирек Кинйәбулатов һәм Рәшит Сабитовҡа бирҙеләр. Шаян һәм тапҡыр телле әҙиптәр һәр тамашасының күңеленә үтеп инерлек һүҙҙәр әйттеләр. Быңдай күренекле шәхестәр менән осрашыу беҙҙең өсөн шатлыҡлы ваҡиға булды.



«Китап» нәшриәтенән килгән Ринат Камалов һәм күп билдәле йырҙар авторы Рәмил Сорағолов та юбилярға ҡарата матур һүҙҙәр әйттеләр, ысын йөрәктән бүләктәр тапшырҙылар.

Ә инде Башҡортостаныбыҙҙың һандуғастары З. Фәтҡуллина, Г. Латыпова, Ф. Ноғомановаларҙың М. Сиражи һүҙҙәренә яҙылған моңло йырҙарын тыңлағанда, һәр беребеҙҙең күңеле ял итеп ултырғандыр. Башҡорт эстрадаһының йондоҙо Фәрит Бикбулатов үҙенең дуҫын – Муса Сиражиҙы «Уралымдың моңо», «һөйөү көсө» тигән йырҙары менән ҙурлап, хөрмәтләп ҡотланы. Йырҙар тамашасыларға шул тиклем тәьҫир иттеләр, хатта ҡайһы берәүҙәр ҡушылып йырлап ултырҙы.



Эйе, концерт бик йөкмәткеле һәм ҡыҙыҡлы уҙҙы. Һәр тамашасы йәненә нәсихәт, тәненә бәрәкәт алып ҡайтып киткәндер тип, уйлайым. Аҙаҡтан, концерт бөткәс, артистарҙан, шағирҙарҙан автограф алып, иҫтәлеккә фотоһүрәткә төшөп алдыҡ...

Якташыбыҙ М. Сиражи өсөн ҡыуаныу, ғорурланыу хистәре күңелдәрҙе биләне. Районыбыҙ халҡы уны хөрмәт итә, республикабыҙ белә. Бына ниндәй яҡташтар, арҙаҡлы шәхестәр тыуҙырған Туймазы ере!

*Мәсәлимова С. (42-се төркөм)*



# Яҡшы уҡытыусы, яҡшы әсә һәм шул уҡ ваҡытта шағыйрә лә булып буламы ???

«Әлбиттә, була»,- тип яуап бирҙе миңә Бикбулатова Гөлмирә Йәмил ҡыҙы. Был ҡыҙыҡлы шәхес менән мин Туймазы ҡалаһының 6-сы һанлы мәктәбендә практика үткәндә таныштым һәм быға бик тә шатмын. «Беҙҙең студент йылдары» Туймазы педагогия колледжы гәзитенең мөхәррире буларак, унан интервью алып һеҙҙе лә был матур кеше менән таныштырырға булдым...

*-Ни өсөн һеҙ уҡытыусы һөнәрен һайларға булдығыҙ?*

- Сөнки мәктәптә уҡығанда мине һәйбәт уҡытыусылар уратып алған ине. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Юлдашбаев Я.С. һәм уның ҡатыны, класс етәксем Рәүилә Ғәлим ҡыҙы, минең уҡытыусы булып китеүемдә ҙур роль уйнанылар. Шиғыр яҙыу һәләтемде лә улар үҫтерҙеләр, миңә ҡеүәт, дәрт бирҙеләр, ҡанат ҡуйҙылар.



Бикбулатова Г.Й.: Эшемдән илһам алам

*-Ҡайһы уҡыу йортон тамамланығыҙ?*

- Мәктәпте тамамлағас, «Ейәнсура тандары» район гәзите редакцияһына эшкә саҡырҙылар, унда бер йыл эшләгәндән һуң БДУ-ның филология факультетына уҡырға индем. Университетта уҡыу дәүерендә факультеттың тел ғилеме кафедраһында лаборант вазифаһын башҡарҙым. 1995 йылды уҡыуымды тамамланым.

*-Уҡытыусы буларак ниндәй бәйгеләрҙә ҡатнашҡанығыҙ булды?*

-1998 йылда «Йыл уҡытыусыһы» бәйгеһендә ҡатнаштым һәм «Йәшлек» республика гәзите призына лайыҡ булдым. Унан тыш балаларым, уҡыусыларым яулаған уңыштар минең өсөн дә оло ҡыуаныс. ҮУның уҡыусылары республика кимәлендә бәйгеләрҙә ҡатнаша, призлы урындар яулай.

*-Уҡытыу эшенән башҡа тағы ла ниндәй эштәр менән мауығаһығыҙ?*

-Шиғырҙар яҙам, улар төрлө гәзит, журналдарҙа баҫылып тора, 2004 йылда «Сүмесле ай» исемле йыйынтығым донъя күрҙе. Бынан тыш шиғырҙарым Бәләбәй ҡалаһында сыҡҡан «Йәйғор» китабында һәм Туймазы ҡалаһында баҫылған «Балҡыштар» йыйынтығында урын алды. 1998 йылда Бәләбәй ҡалаһында үткәрелгән «Илһам шишмәләре» төбәк-ара шиғриәт фестивалендә Гран-при яуланым. Унан башҡа бәйләм бәйләргә, тәмле итеп ашарға бешерергә яратам.

Шиғырҙар яҙам, тигәс, мин Гөлмирә Йәмил ҡыҙының «Сүмесле ай» йыйынтығын уҡып сығырға ашыҡтым, был ҡыҙыҡлы шәхестең ижад емештәре менән тиҙрәк танышыу теләге уянды. Уҡып сыҡтым... Шиғырҙарын бер-бер артлы уҡыған һайын шағирәнең эске донъяһы, уй-кисерештәре миңә көс, дәрт өҫтәне. Гөлмирә Йәмил ҡыҙы минең күҙ алдыма уҡытыусы буларак ҡына түгел, ә ысын лирик күңелле кеше булып килеп баҫты, уның тәбиғәт менән һоҡланыу хисе миңә лә күсте кеүек... Ни эшләп миндә лә хистәремде, уй-фекерҙәремде шиғырға һала торған ошондай һәләтем юҡ икән тип үкенеп ҡуйҙым шул саҡ...

*-Шиғырҙар яҙыр өсөн илһам ҡайҙан килә һеҙгә?*

-Илһам тыуған яҡты һағыныуҙан, туғандарҙан, ғаиләнән килә. Эшемдән илһам алам. Ҡайһы ваҡыт тетрәндергес ваҡиғалар шиғырҙар яҙырға өндәй.

*-Тормош баҫҡыстарын үткәндә осраған ауырлыҡтарҙы еңергә нимәләр булышлыҡ итә?*

-Ғаиләнең ныҡлығы, бер-береңде аңлау, туғандар берҙәмлеге ауырлыҡтарҙы еңергә һәр ваҡыт ярҙам итә миңә.

Миңә Гөлмирә Йәмил ҡыҙының өйөндә ҡунаҡ булып, уның ғаиләһе менән танышыу мөмкинлеге насип булды. Үҙем өсөн Гөлмирә апайҙы тағы ла бер яҡтан астым. Ул яғымлы, һөйкөмлө әсәй ҙә икән. Эйе, ысынлап та был, - берҙәм һәм шуныһы менән матур ғаилә. Тормош иптәше Сәлим ағай менән улар ике ул үҫтерәләр. Гөлмирә апайҙың тереге ныҡ икән шул, иптәше Сәлим ағай яҡшы атай һәм көслө ғаилә башлығы буларак күҙ алдыма килеп баҫты. Бындай кеше менән утты ла, һыуҙы ла үтергә мөмкин. Балаларының да атайы менән әсәһенә оҡшауы миндә «Тимәк, тағы ла ике матур кеше үсеп килә икән»,- тигән уй уятты. Был бик ҡыуаныслы.

*-Тормошта иң ауыры нимә тип уйлайһығыҙ?*

-Тормошта иң ауыры һәм аяныслыһы - яҡын кешеңде юғалтыу, ҡалғандарын һаулыҡ булһа, илдә тыныслыҡ булһа, еңеп була, тип уйлайым.

*-Яҡшы уҡытыусы һәм яҡшы әсә булыу серҙәрен асығыҙ әле?*

-Ғаиләңдә аңлап торһалар, тормош йөгөн иптәшең менән бергә тартһаң, яҡшы әсә лә булып була, эшеңдә лә уңыштарға өлгәшергә мөмкин.

*-Ихлас әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт. Ғаиләгеҙҙә, эшегеҙҙә һәр саҡ тыныслыҡ булһын. Ижади өлкәлә уңыштар юлдаш булһын һеҙгә.*

Ниндәй матур кеше, уҡытыусы, әсә... Гөлмирә Йәмил ҡыҙы минең күңелемдә ғүмерлеккә ҡалыр кеүек. Уның менән яҡындан танышҡандан һуң: «Мин дә ошондай уҡытыусы була алырмынмы? Ошондай әсә булыу минең ҡулдан килерме?»- тигән һорауҙар тыуҙы.

Эйе, ошондай Кеше булырға ынтылырға кәрәк. Бер әҙип әйткән бит: «Кешелә бөтә нәмә лә матур булырға тейеш: йөҙ ҙә, күңел дә, уйҙар ҙа...» Дөрөҫ, Гөлмирә Йәмил ҡыҙында ошоларҙың барыһы ла бар һәм ул шуның менән бәхетле...

*Абдуллина Д. (42-се төркөм) әңгәмәләште. Авторҙың фотоһүрәте.*



## Ҡыҙҙар моңо

***Яҙ килә.***

*Тирә-йүнгә нурҙар һибеп,*
*Йәмле яҙ килеп етте.*
*Бар тирә-яҡ нурға сумды,*
*Ҡарҙары ирепбөттө.*

*Тып-тып килеп ҡыйыҡтарҙан*
*Тамсылар тама ергә.*
*Шундай яҡты, саф һауа,*
*Эх, рәхәт тә һуң беҙгә!*

*Тәҙрәнән баҡһаң урамға*
*Ҡояш тышҡа саҡыра.*
*Юҡ, дәресем бөгөн күп,*
*Иртәгәгә ҡалдырмам.*

Лотфуллина И. (32-се төркөм)



***Әсәйем.***

*Дуҫтар янда булһа ла*
*һин кәрәк миңә, әсәй!*
*һинһеҙ бәхетле булмаҫмын,*
*һинһеҙ йәшәй алмаҫмын.*

*Барыһына өлгөрәһең,*
*Барыһын да эшләйһең.*
*Матур биҙәктәр һалып*
*Шәлен, шарфын бәйләйһең*

*Шатлыҡты ла ҡайғымды ла*
*һиңә һөйләп бирәмен,*
*һинән башҡа яҡын донъяла*
*Дуҫым юғын беләмен.*

Ниғмәтуллина А. (32-се төркөм)

**Бикбулатова Гөлмирә Йәмил ҡыҙы:**

***Атай йорто.***

*Олоғаям инде мин үҙем дә,*
*Тик күңелем һаман бишектә.*
*Үҙ баламды бауырыма баҫһам –*
*Атам-әсәм моңон ишетәм.*
*Атай йорто...Ниңә шулай*
*Күңел түрен биләп алғанһыңҒ*
*Биш ҡыҙ бала һиндә гөлдәй үҫтек,*
*Аҡ юлдарың асып һалғанһың.*
*Атай йорто...Ишетелеп ҡала*
*һиндә сыр-сыу килгән мәлдәрем.*
*Хыял аттарымда елеп ҡайтам,*
*Юлдарым бит минең өҙәрем.*
*Атай йорто...һәр саҡ һинең миңә*
*Мейесеңдең ҡалһын йылыһы.*
*Күңелдәрҙе һыуындырмай тотһон*
*Тыуған йорттоң тере һулышы.*

***Рәхмәт һүҙҙәрем.***

*Рәхмәт һеҙгә, атай-әсәй*
*Үҫтереп аяҡ баҫтырғанығыҙға.*
*Төндәрем илағанымда*
*Йыуатып, тымыҙғанағыҙға.*

*Рәхмәт һеҙгә барыһы өсөн дә,*
*Яҡшы тәрбиә биргәнегеҙгә.*
*Етем итмәй генә беҙҙе*
*Бергә-бергә үҫтергәнегеҙгә.*

*Рәхмәт тибеҙ һеҙгә –*
*Беҙ һеҙҙе яратабыҙ.*
*һәр саҡ дөрөҫ юл өйрәтеп,*
*Яҡшы терәк булып ҡалығыҙ.*

*һеҙгә оҙон ғүмер теләйбеҙ,*
*Бер ҡасан да ҡартаймағыҙ.*
*Йәшәгеҙ гел шулай татыу*
*Иҫән-һау ғына булығыҙ.*

*Ауыр һүҙҙәр әйтеп ҡай саҡ*
*Күңелегеҙҙе төшөргәнгә*
*Баш эйеп һеҙҙең алда*
*Беҙ ғәфү үтенәбеҙ.*

Лотфуллина И. (32-се төркөм)

### *Яҙ килә.*

*Яҙ килә, яҙ килә!*
*Күңел йыр, моңға тула.*
*Бөтә кеше лә белә:*
*Яҙ айы матур була.*

*Ҡыйыҡтарҙан тамсы тама,*
*Уйнатып йөрәктәрҙе*
*Йылы яҙғы елдәр тышта*
*Тирбәтә тирәктәрҙе.*

*Ҡырҙа эштәр әле гөрләй,*
*Аҙаҡ булыр һабантуй.*
*Кәкүк сәйе алда тора,*
*Табындарҙа- тулы һый.*

*Уян донъя! Күҙеңде ас!*
*Гөрлә әле тағы ла.*
*Ғүмерҙең иң күңеллеһе –*
*Йәмле яҙ айҙарында.*

**Атанғолова Г. (32-се төркөм)**

*Зәңгәр күктә ай йондоҙҙар һибә,*
*Йондоҙ оса аҡ юл ҡалдырып.*
*Шул аҡ юлдан беҙ осабыҙ кеүек*
*Пар ҡанатлы аҡ ҡоштар булып.*

*Беҙ-донъяла иң бәхетле кеше,*
*Осраһа ла юлда кәртәләр.*
*Фәрештәләр беҙгә аҡ юл һибер*
*Ә яуыҙҙар урап үтәрҙәр.*

*Фәрештәләр беҙҙең саф хистәргә*
*Ҡанат ҡағып, бәхет сәсерҙәр.*
*Беҙҙең баҫҡан аҡ юлдарға хәҙер*
*Матур-матур гөлдәр үҫерҙәр.*

**Дауытова Д. (32-се төркөм)**

### *Өләсәйем.*

*Сәстәреңә аҡ сал төшкән инде,*
*Йыйырсыҡтар баҫҡан битеңде.*
*Һәр йыйырсыҡ-үҙе бер миҙгел ул,*
*Һәр сал сәсең – үҙе бер ғүмер.*

*Оҙон тормошо юлы үткәнһең һин,*
*Ҡайғы-хәсрәт күреп был юлда.*
*Күпме кеше күреп, күпме белеп,*
*Йәшәгәнһең һин был донъяла.*

*Ауыр саҡтар булған, йәшермәйһең,*
*Ә шатлыҡтар килһә шул саҡта?*
*“Килде, балам, тик һуң килде,*
*Күптәре инде юҡ шул арала.”*

*Бер тилмереп икмәккә,*
*Таҙа һыуға, һауаға,*
*Йәшәнек шул баш эймәйсә*
*Дошмандарҙың алдына.*

*Тормош юлы бик атмарлы,*
*Күрҙем һуғыш, үлемде*
*Еңеү көнөн, шатлыҡ тулыҫ.*
*Меңләгән йөҙ балҡышын.*

*Йәшә, өләсәй йәшә әле,*
*Шатлыҡ күмһен йөҙҙәрең.*
*Йөрәк утың һүрелмәһен,*
*Башҡа ҡайғы күрмәҫһең.*

**Хәйруллина Г. (32-се төркөм)**

***Гәзитте ойоштороусы*** - – башҡорт теле уҡытыусыһы Кәримова Г.Я.
***Баш мөхәррир*** – Абдуллина Динара
***Мөхәрририәт:***
Әхмәҙиева Зилара,
Ибраһимова Диниә,
Мәсәлимова Светлана,
Исмәғилева Ләйсән,
Ибраһимова Диниә
Беҙҙең адрес: Туймазы ҡалаһы Комаров урамы, 3б.
Беҙҙең сайт: http://www.tpkrb.ru/

